Балаларға бағышланған Изге Яҙмалар

Тәҡдим итә



# Күктәр, Алланың матур өйө

Автор: Edward Hughes

Кәүҙәләндерелгән: Lazarus
Alastair Paterson

Яраҡлаштырылған: Sarah S.

Тәржемә: www.christian-translation.com

Сығарылған: Bible for Children
www.M1914.org

©2021 Bible for Children, Inc.
Лицензия: Һеҙҙең күсермәгеҙ һатыуға тәғәйенләнмәгән булһа,
был хикәйәне күсерергә йәки баҫтырырға хоҡуҡығыҙ бар.

Ғайса ерҙә йәшәгән сағында, үҙенең шәкерттәренә Күктәр тураһында һөйләне. Ул Күктәрҙе “Минең Атам йорто” тине, һәм унда бик күп миллектәр тине.

Миллектәр – ул ҙур, матур йорт.

Күктәр – ул ерҙәге йортҡа ҡарағанда тағы ла ҙурыраҡ йорт.



Ғайса әйтте: “Һеҙгә урын әҙерләр өсөн, Мин күккә барам. Унда барып һеҙгә урын әҙерләгәндән һуң, Мин әйләнеп ҡайтасаҡмын һәм һеҙҙе үҙем янына алып китәсәкмен”. Ғайса ысынлап та үленән терелтелгәндән һуң күккә күтәрелде.  Уның шәкерттәре ҡарап торғанда, болот уны уларҙың күҙҙәреннән алып китте.



Шул ваҡыттан алып, христиандар Ғайсаның ҡабат килеп уларҙы алам тигән вәғәҙәһен иҫкә төшөрәләр. Ғайса үҙен көтмәгәндә киләсәкмен, тине. Ул килгәнсе үлгән христиандар менән нимә булыр? Изге Яҙмаларҙа улар тура Ғайса янына барасаҡтар тип әйтелә. Тәндән ҡотолоу - Хоҙай ҡаршына кереү тигән һүҙ.



Асылыш, Изге Яҙмаларҙың һуңғы китабы беҙгә күктең ниндәй матур икәнлеген һөйләй.  Иң матуры - Күк - Алланың матур йорто.  Алла бар ерҙә лә бар, ләкин уның тәхете Күктә.



Фәрештәләр һәм башҡа күк йән эйәләре Алланы күктә данлайҙар. Үлгән һәм күккә киткән Алла халҡы ла шулай эшләй.  Улар Аллаға махсус маҡтау йырҙары йырлайҙар.



Бына улар йырлаған йырҙарҙың береһененең һүҙҙәре:

ҺИН ЛАЙЫҠЛЫ, СӨНКИ ҮҘ ҠАНЫҢ МЕНӘН АЛЛАҒА ҺӘР БЕР ҠӘБИЛӘНӘН ҺӘМ ТЕЛДӘН КЕШЕЛӘР ҺАТЫП АЛДЫҢ, ҺӘМ УЛАРҘЫ БЕҘҘЕҢ АЛЛАБЫҘ ӨСӨН БАТШАЛАР ҺӘМ РУХАНИЙӘЛАР ЯҺАНЫҢ.

(Асылыш 5: 9)



Изге Яҙмаларҙың һуңғы биттәре Күктәрҙе “Яңы Иерусалим” тип тасуирлай. Ул бик ҙур һәм бейек диуарҙар менән уратып алынған. Диураҙар кристалл кеүек саф йәшмә таштан эшләнгән. Гүзәл төҫтәр менән балҡып, төп диуарҙарҙы гәүһәрҙәр һәм гәүһәр таштар ҡаплап тора. Ҡаланың һәр бер ишеге тотош саф ынйыларҙан эшләнгән.



Был бөйөк ынйы ҡапҡалар бер ҡасанда ябылмай. Әйҙәгеҙ эскә үтеп, унда нимә барлығын ҡарайыҡ - - - Бына һиңә Мә! Күктәр эстән тағы ла матурыраҡ. Ҡала саф быяла кеүек, саф алтындан эшләнгән.



Батша тәхетенән ғүмер һыуы матур, таҙа йылға булып аға.  Йылғаның һәр ярында, Эдем баҡсаһындағы кеүек, ғүмер ағасы бар.  Был бик үҙенсәлекле ағас.  Ул ун ике төрлө емеш бирә, һәр айҙың үҙ төрө.  Ә был ағастың япраҡтары халыҡты шифалар өсөн тәғәйенләнгән.



Күктәрҙә ҡояш та, ут та кәрәкмәй. Алланың Шокере бөтә ерҙе иҫкиткес яҡтылыҡ менән ҡаплай. Бында төн юҡ.



Хатта хайуандарҙа Күктәрҙә икенсе төрлө.  Улар барыһы ла татыуҙар.  Бүре һәм бәрәстәр йәшел үләндә бергә көтөләләр.  Хатта ҡырыҫ арыҫландар үгеҙ кеүек һалам ашайҙар.  Алла әйтә: “Минең изге тауымда уларға бер кем дә зыян килтермәй”.



Артҡа боролоп ҡараһаҡ, Күктә ҡайһы бер әйберҙәр юҡ. Яуыҙ һүҙҙәр бер ҡасан да ишетелмәй. Бер кем дә эгоистлыҡ менән көрәшмәй. Ишектәрҙә йоҙактар юҡ, сөнки Күктә ҡараҡтар юҡ. Ялғансылар, үлтереүселәр, сихерселәр йәки башҡа боҙоҡ кешеләр юҡ. Күктә ғонаһ юҡ.



Күктәрҙә Алла янында
башҡаса күҙ йәштәре
юҡ.  Ҡай саҡта Алла
халҡы тормоштарында
ҙур ҡайғы булһа илай.
Күктәрҙә Алла һәр бер
күҙ йәшен һөртөп ала.



Унда, Күктәрҙә үлем юҡ. Алла халҡы Хужаһы менән мәңге буласаҡ. Башҡаса ҡайғылар булмаç, илаштар булмаç, ауыртыныуҙар. Сирҙәр юҡ, айырылышыу юҡ, ерләүҙәр юҡ. Һәр кем мәңгелеккә Алла менән бәхетле буласаҡ.



Иң яҡшыһы – Күктәр Ғайса Пәйғәмбәрҙең Ҡоткарыусы булыуына ышанып, уға Хужаһы итеп табыныусы малайҙарға ла, ҡыҙҙарға ла (ололарға ла) тәғәйенләнгән. Күктә Тормош китабы тип аталған китап бар. Ул кешеләрҙең исемдәре менән тулы. Унда кемдең исемдәре яҙылғанын беләһегеҙме?

Ғайса Пәйғәмбәргә ышанған барлыҡ кешеләр.

Һинең исемең унда бармы?






Изге Яҙманың Күктәр тураһында һуңғы һүҙҙәре иҫкиткес саҡырыу.  Рух та, Кәләш тә әйтә: “Кил!  Кем ишетһә, әйтһен: Кил!  Кем һыуһаған, килһен, теләгән кеше тормош һыуын бушлай алһын”.



Күктәр, Алланың матур өйө

Алла Һүҙеннән, Изге Яҙманан хикәйә

урынлашҡан

14 Иван; 2 Коринфән;
4, 21, 22 Асылыш

“Һинең һүҙҙәреңдең асылыуы мәгърифәтле.”
Мәдхия 119:130

# Тамам

Был Изге Яҙма хикәйәһе һеҙҙе бар иткән һәм Уны
танып белеүен теләгән иҫкиткес Алла тураһында һөйләй.

Беҙҙең насар эштәр эшләгәнде Алла белә, һәм был эштәрҙе ул
ғонаһ тип атай. Ғонаһ өсөн яҙа – үлем, ләкин Алла һеҙҙе шул тиклем
ярата, хатта үҙенең берҙән-бер улы Ғайсаны һеҙҙең өсөн тәреләү үлергә
һәм ғонаһтарығыҙ өсөн яҙаланырға ебәрҙе. Унан һуң Ғайса терелтелде
һәм өйөнә күккә ҡайтты. Әгәр ҙә һеҙ Ғайсаға ышанһағыҙ һәм унан
ғонаһтарығыҙҙы кисереүен һораһағыҙ, ул уны эшләйәсәк. Ул һеҙҙең
тормошҡа инер, хәҙер һеҙҙең күңелдә йәшәр, һәм
һеҙ уның менән мәңге йәшәрһегеҙ.

Әгәр ҙә һин быны дөрөҫлөгөнә ышанһаң, Аллаға былай тип әйт:
Хөрмәтле Ғайса, мин ышанам, Һеҙ Алла һәм минең ғонаһтарым өсөн
үлер өсөн кеше булдығыҙ, терелтелдегеҙ һәм бына хәҙер һеҙ яңынан
тере. Мин хәҙер яңы тормош башлар өсөн, зинһар минең тормошҡа
инегеҙ һәм ғонаһтарымды кисерегеҙ, һәм бер көн барып, мәңге
һеҙҙең менән булырмын. Һиңә буйһонорға һәм Һинең
Балаң кеүек йәшәргә булыш миңә. Амин.

Изге Яҙманы уҡы һәм Алла менән көн һайын һөйләш. Иван 3:16